*Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ*

# ”Мин артығын күктән һорамайым...”

Гүзәл Ғәлиеваның биографияһы менән танышып, ни ғүмер эсендә төрлө эштәрҙә эшләп, әллә нисә һөнәр үҙләштереп, бер нисә вузда уҡығанлығын белеп, бер аҙ ғәжәпһенеп ҡалдым. Ул колхоз эше, санитарка, секретарь-машинистка, район гәзите редакциялары, Өфөлә төрлө учреждениеларҙағы вазифалар. Юғары белем алыуы ауыл хужалығы институтынан башлап, Башҡорт дәүләт университетына күсеү, уны тамамлағас, эштә сәнғәт өлкәһенә тартылып, Мәскәүҙең ГИТИС — Дәүләт театр сәнғәте институтында ситтән тороп уҡыу.

Үҙ нәүбәтендә үҙләштерелгән эш-һөнәрҙәре ҡалай күп: журналист, театр белгесе, тәржемәсе, редактор, етәксе-ойоштороусы... Һәр береһе мәшәҡәтле, абруйлы һәм яуаплы, ҙур көс-һәләт талап иткән эш. Былар үҙҙәре — оло тормош, һөнәр мәктәбе. ”Ниндәй генә һөнәргә тотонмайым, эшемде профессиональ кимәлгә еткерергә тырышам”, — ти Гүзәл үҙе.

Шул уҡ ваҡытта Гүзәл Ғәлиева ижад кешеһе, шағирә лә бит әле. Әлбиттә, донъяла ҡойоп ҡуйған шағирҙар, әҙиптәр, ижади профессионалдар бик аҙ. Беҙҙең яҙыусыларҙың күпселеге ижад эшен ҡайҙалыр көндәлек хеҙмәт менән ҡушып алып барырға мәжбүр. Ижад һөнәре генә донъя көтөүҙе тәьмин итә алмай. Гүзәл Ғәлиева ла ғүмере буйы — дәүләт хеҙмәтендә. Әҫәрҙәр эш араһында илһам килгәндә генә яҙыла. Шуға улар күләм яғынан бигүк ҙур түгел, әммә тос һәм һәлмәк поэтик ижад.

Шиғриәте тематикаһы, жанрҙары менән төрлө-төрлө: балалар өсөн шиғырҙар, лирика, философик поэзия, тәржемәләр. Үҙем әҙип, әҙәбиәтсе ғалим булараҡ, мине шағирҙың, прозаиктың тормош юлы менән ҡатар уның рухи донъяһы, ижад даирәһе нығыраҡ ҡыҙыҡһындыра. Гүзәл Ғәлиеваның ижадын да ошо күҙлектән аңларға һәм баһаларға тырышам.

Үҙе балалар тәрбиәләп үҫтергән шағирәнең балаларға бағышланған шиғырҙары — үҙҙәре бер поэтик донъя. Балалар психологияһын тәрән аңлап, уларҙың зауыҡтарын белеп яҙылған йөкмәткеле, матур тасуири биҙәкле кескәй әҫәрҙәр (”Мин йәшәйем Уралда”, ”Ҙур бейәләй”, ”Ирәмәл иләндә” йыйынтыҡтары).

Поэтик натура булараҡ, Гүзәл Ғәлиеваның һәләте ололарға адресланған лирик һәм философик йөкмәткеле шиғырҙарында нығыраҡ асыла. Унда ла ул донъяға, кешеләргә күберәк әсә күңеле һәм күҙе менән баға. Ғәзиз әсәләргә бағышланған шиғырҙар үҙҙәре генә лә ни тора! ”Әсәйем”, ”Күңелем өшөгәндә”, ”Әсәйем Зөмәрә рухына”, ”Зәңгел һыуыҡтарҙан...” һәм башҡалар.

Гүзәлдең лирикаһына, үҙе әйткәнсә, ”кескәй генә Ер шарындай йөрәгенә” донъяның бар биҙәктәре, кешеләрҙең ҡайғы-шатлыҡтары, төрлө тетрәнеүҙәр — һәммәһе-һәммәһе һыя ала.

Кескәй генә Ер шарындай йөрәгемдең
Үҙәккәйе бик йыш тетрәп һыҙлай булыр,
Ҡояш булып янып һүнгән һөйөүемдең
Меңәр йылдар яйлап һыуыныр ҡуҙылыр ул.

Бына ҡалайыраҡ бит шағирә йөрәгенең дәүмәле һәм яныр ялҡындары менән һүрелер ҡуҙҙары!

Шағирә йәне ҡай саҡ Ер шарына һыймай, күккә, йыһанға аша. Унынҡса, гүйә, ”Тик йыһанда мәңге аһәңлек, унда күңел бөйөк һәм мәңгелек! Унда минең ижади ҙа мәлем — үҙ ҡылдарын үҙе көйләй йәнем”. Былай тип оло йәндәр генә әйтә ала торғандыр.

Шул уҡ ваҡытта шағирә кәрәк мәлендә ”Мин асфальтты тишкән үлән” тип тә тиңләй. ”Мин асфальтты тишкән үлән, ауырлыҡтың хаҡын беләм”, — ти икән, быының образлы мәғәнә ҡеүәһен дә самалап була. ”Мин табынған кешем һынын йондоҙ итеп сөйәм бейек. Йондоҙҙарым, бер яндырып, бер туңдырып йөрәгемде итә беше. Ә үҙемде итә кеше” ише шиғыр юлдары ла тәрән мәғәнәләргә эйә. Әгәр Гүзәл: ”Бүлдермәгеҙ уйҙарымды, минең аша йыһан аға”, — ти икән, беҙ быға ла инанып ҡарайбыҙ.

Гүзәл Ғәлиеваның быйыл йыл башында ғына донъя күргән, хәҙергәсә ижад ителгән шиғри әҫәрҙәренең иң күренеклеләрен үҙенә туплаған ”Ирәмәлдә — алтын тамыр” китабындағы һәр шиғырынан тиерлек автор йөрәгенән сыҡҡан юлдарҙы цитаталар итеп килтерге килә. Тик уға ҡағыҙ биттәре генә аҙ, күптәре күңелдә, хәтерҙә йөрөрлөк аҫыл һүҙҙәр.

Гүзәл исеменә бәрәбәр ижады менән дә гүзәл. ”Гүзәлем! — ти икән һине берәү, гүзәл булмай ҡара!” — ти ул үҙе лә. Эйе, Гүзәл Ғәлиева тормошта ла, ижадта ла, минеңсә, гүзәл булып ҡала.

”Башҡортостан ҡыҙы” журналының былтырғы беренсе һанында Гүзәл Ғәлиеваның интервьюһынан түбәндәге юлдарҙы уҡып, хайран ҡалып, үҙемә уның ижадын яңыса астым.

”Йәшәй-йәшәй аңлайһың икән тормоштоң асылдарын, — ти ул. — Атайым-әсәйем бер-бер артлы донъя ҡуйҙы. Ҡустым үлеп китте. Үҙемә ҡурҡыныс диагноз ҡуйҙылар. Шул ваҡытта дингә, иманға килдем, намаҙға баҫтым. Яман ауырыуымды еңеп сығырға Хоҙай ярҙам бирҙе, тип уйлайым”.

Әйтәһе һүҙем йәнә шул: Гүзәл Ғәлиеваның ижадында ла иман көслө. Хоҙайға инаныу ғына түгел, кешелеккә инаныу уй-тойғоһо, оло инаныс ул. Бер шиғырында Федор Достоевскийҙың атаҡлы ”Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр!” тигән тапҡыр фекере менән бәхәсләшеп, ”Донъяны тик иман ҡотҡарыр!” тигән ҡыйыу фекергә килә. Шуға бәйле рәүештә Гүзәл Ғәлиева шиғриәтенә иман, илаһилыҡ мотивтары килеп инә. Бер шиғырында ул былай ти:

Ауыр саҡта миңә һине биреп,
Ғәҙеллеген ҡылды микән Хоҙай?
Бәләм менән мине һиңә таҡты,
Ерҙең ғәҙелһеҙлегеме шулай?
Ни булһа ла, рәхмәт Хоҙайға, тим,
Тәҡдиремде шулай ҡылған өсөн...

Йәки:

Мин артығын күктән һорамайым,
Бер доғаға тора намаҙым:
Һөйөү караптарың ҡыйралһа ла,
Имен йөҙһөн ғүмер карабың.

Йәки ”Ирәмәлдә — алтын тамыр” тигән күңелнамә поэмаһында Ирәмәлде шулайыраҡ сифатлай:

Кеше заты күңеленең
Хоҙай ҡушҡан сафлығы —
Хәҡиҡәткә тоғролоғо,
Ниәтенең аҡлығы —
Тәү үрнәге һиндә генә.
Рухи камиллыҡ эҙләүсе
Һиңә тора атлығып.

Ғөмүмән, Гүзәл Ғәлиеваның иң яҡшы поэзия өлгөләрен нескә хисле, фәлсәфәүи мәғәнәле, илаһи рухлы күңелнамә донъяһы, тиер инем мин. Шулар араһында ”Ирәмәлдә — алтын тамыр” поэмаһы поэтик алтын тамырҙы бер үҙәккә йыйған, күңел күркенең бейеклеген һәм бөйөклөгөн туған Ирәмәле кимәленә күтәрешкән кеүек. Унда шағирәнең шиғриәтенә хас лирик, философик һәм илаһилыҡ мотивтары фокустағы шикелле бер нөктәгә йыйыла. Авторҙың илаһи уй-хыялдарға бирелеүе, хатта астрология менән мауығыуы ерле юҡтан түгелдер.

Гүзәл Ғәлиеваның поэтик ижад үрҙәрен тыуған яғының йырҙарҙа данланған аҡ ташлы Ирәмәле үрҙәре менән сағыштырып ҡарар инем. ”Ирәмәлдә — алтын тамыр” поэмаһы шуның бер тиң оло үрнәге бит.

Күренекле шағирәбеҙҙең киләсәктә шунса аҡ, гүзәл үрҙәргә артыла барыуын теләйем.